МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

# Тәрбиәселәр өсөн консультация

## *Бала тәрбиәләүҙә халыҡ ижадының әһәмиәте*

Башҡорт теленең үҙенсәлегенә элек-электән иғтибар күп булған. Уны өйрәнеүсе, тикшереүсе, хатта башҡортса һөйләшеүсе урыҫ һәм сит ғалимдары, яҙыусылары ла байтаҡ булған. Ул ғына ла түгел, оло-оло академиктар башҡорт теленең үҙенсәлеген, төҙөлөшөн тикшергәндәр һәм һоҡланып,"яғымлы, ҡолаҡҡа ятышлы, бай" тигән һығымта ла яһағандар.

Кешенең теле ни тиклем бай һәм матур булһа, күңеле лә шулай гүзәл тәрбиәләнә. Фекере лә бай, зиһене лә тәрән, зирәк аҡыллы,яҡты аңлы була. Тел – ул аралашыу ҡоралы ғына түгел. Тел – кешенең тәрбиәле булыуын да күрһәтә, белемен дә сығылдыра. Тыуған телендә лә, урыҫ телендә лә йәки хатта берәй сит ил телендә лә саф итеп, ҡатнаштырмай ғына, һөйләшеп торған теленә ихтирам күрһәтеп һөйләшкәнн кешене тыңлауы – үҙе бер зауыҡ.

Башҡорт халҡында тәрбиә ҡанундары теҙеп кенә яҙылмаған, әммә уның барлыҡ ижадында тәрбиә рухы сағыла: фәлсәфәүи фекерле эпостарҙан башлап йомаҡтарға тиклем, мәшһүр оҙон көйлө йырҙарҙан алып таҡмаҡтарға хәтлем , бейеү һәм ҡул эштәренә саҡлы. Тәрбиәнең төп йүнәлеше – рухи байлыҡ. Рухи байлыҡ төшөнсәһе иһә бик киң. Әммә иң мөһим сифаттарҙан һаналғандары- изгелек. Халҡыбыҙ балала бәләкәй саҡтан уҡ изге күңел тәрбиәләргә тырышҡан. Күңелендә матурлыҡ, яҡшылыҡ тойғоһо, әҙәплелек һәм башҡа һанап бөткөһөҙ гүзәл тойғоларҙың бөтәһе лә бер маҡсатҡа – изгелек тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. "Изге күңелле бул, кешеләргә изгелек ҡыл".Фәкәт ошо йүнәлештә тәрбиәләнгән бала ғына әҙәпле, тәрбиәле һаналған.

Башҡот халыҡ эпостарында Тыуған ил, ер-һыу ҡәҙерен белеү идеяһы – үҙәк проблема. Урал образын ғына алайыҡ. Халыҡ бәхете өсөн көрәшеп, донъя ҡуйыр мәле еткәс, Уралға тере һыу килтерәләр, әммә үҙ ғүмеренән донъя күркәмлеген, именлеген, халыҡ бәхетен артыҡ күргән батыр тере һыуҙы тирә-яҡҡа бөркөп ебәрә. Уны "Ил бәхете ине" тиҙәр.Тимәк, халҡыбыҙҙа тәрбиәнең иң юғары нөктәһе – балаңдың ил бәхете булып йәшәүе.

Тимәк, донъяла яҡшылыҡтан да бөйөгөрәк, юғарыраҡ нәмә юҡ. Кеше яҡшылыҡ ҡылып ҡына йәшәргә тейеш. Хатта ямандың үҙенә лә тик яҡшылыҡ менән генә ҡаршы торорға кәрәк. "Урал батыр"ҙың идеяһында был фекер ярылып ята.

Был тәрбиәне ҡасан бирә башларға һуң?

Әлбиттә, бала тыуғас та, бишек йырҙары йырлап башлайҙар.

Күпме наҙ, ниндәй ихласлыҡ был йырҙарҙа! Бынан да матурыраҡ, бынан да моңлораҡ көй бармы икән?!Тыуған моң да, тыуған те һымаҡ,бишек йырынан башланалыр моғайын. Боронғо бишек йырҙарының – бишек моңдарыныңҡайһы замандарҙа ижад  ителеүен бөгөн килеп асыҡ ҡына әйтеүе ауыр. Халыҡ ижадының ҡәҙерле таршағы булған бишек йырҙары – тәрбиәләү алышы итеп ритмлы моңдарҙы ижад икән,хатта уларҙың баштараҡ һүҙҙәре лә булмағандыр, бәлки. Шуға күрә лә,күп кенә бишек йырҙарына "әлли-бәлли"кеүек һүҙбәйләнештәре килеп кергән.

Халҡыбыҙ, үҙ сабыйын күкрәк һөтө менән генә туҡландырып ҡалмайынса, уның саф рухын көй-моң менән байыҡтыра барған. Бәләкәй сабыйына ул аңлар кимәлдә көйөн дә, һүҙен дә ижад итеп, үҙ илен,  тыуған тупрағын яратып йәшәргә өйрәткән.

Сабый аңы үҫә барыу менән, бишек йырҙарының сюжет алымдары ла, моң даирәһе лә тәрәнәйә һәм киңәйә бара.

Халыҡ үҙенең бишек йырҙарында бик ҙур маҡсат ҡына ҡуя – үҙенең киләсәге булған сабыйын ысын кеше итеп тәрбиәләү, йәғни үҫеп буйға етеүен, ғалим булып китеүен, аҡыллы, бәхетле булыуын һәм башҡаларын теләй.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, халҡыбыҙҙың көн-күрешендә ҙур урын биләгән бишек йырҙары онотолоп бара.

-Әйҙәгеҙ,хәҙер үҙегеҙ белгән бишек йырҙарын иҫкә төшөрәйек.Уны бәлки һеҙ бала саҡтан,әсәйегеҙ йырлағандан бире күңел түрендә һаҡлайһығыҙҙыр,бәлки үҙегеҙ һөйөклө сабыйҙарығыҙға

йырлағанһығыҙҙыр,бәлки ҡайҙандыр ишетеп беләһегеҙҙер.(Әйтеү,мөмкин йырлау).Мәҫәлән,

Әлли-бәлли көйләрмен,

Хикәйәләр һөйләрмен.

Тәүфиҡле бул, бәхетле бул

Ғүмерле бул, тейәрмен

Халыҡ ижадының иң таралған әһәмиәтле бер төрө – әкиәттәр. Уларҙың нигеҙен тоғролоҡ, гүзәллек мотивтары, ҡыйын хәлдә ҡалған кешеләргә ярҙам итергәынтылыш, кешеләргә һәм уларҙың хеҙмәтенә хөрмәт менән ҡарау идеяһы тәшкил итә. Әкиәттәр балаларҙы яманды яҡшынан, яуызлыҡты изгелектән айырырға өйрәтә, аҡыллы кәңәштәр бирә. Балалар әкиәттәрҙе яратып тыңлай һәм һөйләй, үҙҙәрен шул ваҡиғалар эсендә ҡатнашып, ҡайнаған бер кеше итеп хис итә башлай.

Әкиәттәр – тәрбиә биреү буйынса халҡыбыҙҙың тиңдәшһеҙ хазинаһы, ҡомартҡыһы ул. Улар балаларҙы тойғоло хистәр тыуҙыра, үҙ халҡының тоғро улы, ҡыҙы итеп тәрбиәләүҙә хәл иткес урын тота.(Мәҫәлән ниндәй әкиәттәрҙә?)

Йомаҡ - халыҡ ижадының бик боронғо, тотороҡло һәм үҫә торған жанрҙарының береһе. Йомаҡ өҫтөндә эште балалар менән кесе йәштән үк башларға мөмкин. Йомаҡтарҙы балалар бик яратып тыңлай, ҡоя һәм сисә. Улар балаларға белем һәм тәрбиә биреүҙә иң яҡшы дидактик материал булып торалар. Йомаҡтар тыуған илгә һөйөү, зиһен тиңлеген, иғтибарлылыҡ тәрбиәләй. Уларҙы сисеү өсөн бала хәтер һандығын аҡтара. Оператив хәтер аша йомаҡтағы һүрәтләнгән нәмә менән яуап араһындағы оҡшаш яҡтарҙы анализ һәм синтез аша эҙләй һәм таба. Йомаҡтарҙы сискәндә бала матурлыҡты күрергә һәм аңларға өйрәнә, халыҡтың тормошо менән таныша.Күренекле педагог М.А.Рыбникова йомаҡтарҙы юҡка ғына “тормошто, донъяны танып белеү, өйрәнеү курсы” тип атамаған.

Йомаҡ, үҙе бәләкәс кенә булһа ла, тос жанр. Ул балаларҙы уйланырға мәжбүр итә, телен образлыҡ менән байыта. Балаларға йомаҡ ҡойоу кисәләре,

логик һәм дидактик уйындар үткәреп торорға кәрәк. Шулай уҡ йомаҡ төҙөү уйындары ла үткәрелә.Бының өсөн предметтың төп билдәләре бирелә, ә уҡыусылар шунан сығып йомаҡ төҙөйҙәр.

Халыҡтың ҙур тормош тәжрибәһен туплаған, дидактик йөкмөтле, образлы, ҡыҫҡа ләкин тамамланған һөйләмдәр мәҡәл тип атала. Мәҡәлдәрҙең әхләҡ тәрбиәһе биреү  көсө ҙур. Иң беренсе уларҙың кеше аҡылына, уның хис-тойғоларына көслө тәьҫирен билдәләргә кәрәк.

Мәҡәлдәрҙең көсө уларҙың быуандар аҡылын, хеҙмәт һәм социаль тәжрибәһен туплауҙарына һәм ҡыҫҡа, һыйҙырышлы, образлы булыуҙарына бәйләгән.Тәьҫир  итеү көсөнөң психологик моменты, күрәһең, уларҙың йәмәғәтселек фекере булып ҡабул ителеүендәлер. Мәҡәлдәр менән кешеләр бер-береһен тәрбиәләйҙәр. Һүҙ ыңғайында ғына әйтелгән мәҡәлдәр балаларға ыңғай тәьҫир итә, улар тәбиә эшендә бик яҡшы ҡорал.(Мәҫәлән , Һаулыҡтың кеше тормошонда ни тиклем мөһим роль уйнауы тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ?Байлыҡ башы-һаулыҡ.Халыҡ һаулығы-дәүләт байлығы.Аҡыллыға баш ҡиммәт-аҡылһыҙға мал ҡиммәт.Тәне һауҙың-йәне һау....)

Күп кенә халыҡ афоризмдары күрһәтеүенсә,һаулыҡты юғалтыуы бик анһат,ә ҡайтарыуы ҡыйын.Ошо темаға ярашлы мәҡәлдәр....Ауырыуҙың һәйбәте юҡ.Ауырыу ботлап инә,мыҫҡаллап сыға... ).

Халыҡ фекеренсә,мораль-психик һәм физик һаулыҡтың нигеҙе эш һәм хәрәкәткә ҡайтып кала бит инде.Ошо темаға ярашлы ниндәй мәҡәлдәр беләһеҙ?Эш-тормоштоң йәме.Эш менән үткән ғүмер-алтын ғүмер.Эшләһәң,эш ҡарышмай.....).

Байрамдар, йолалар тураһында айырым әйтеп үтергә кәрәктер. Мәктәпкәсә йәштәге һәм ғөмүмән, бөтә балалар ҙа байрамдарҙы бик ярата. Улар баланың хәтерен, телмәрен үҫтереүгә, һәләттәрен асыуға бейеүҙәр аша эстетик һәм физик яҡлап камиллаштырыуға булышлыҡ итә. Ә иң мөһиме, йолалар аша беҙ балаларҙа үҙ халҡына һөйөү тәрбиәләйбеҙ.Милли байрамдар

тик башҡорт халҡына ғына хас булған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе асыҡ күрһәтә.Бәләкәйҙәр йыр-моң, уйын-көлкө аша хәтерҙәрендә ныҡлы ҡалдыра.

Тыуған яҡты өйрәнгән саҡта балаларҙы күберәк тәбиғәткә, данлыҡлы урындарға сәйәхәткә йөрөтәбеҙ.Тере тәбиғәт, уның ҡомарҡкыһы менән танышыу бик оҙаҡҡа хәтерҙә ҡала һәм, иң мөһиме, үҙ иленә ҡарата һөйөү, ғорурланыу хисе уята.

Һәр йола байрамының үҙенең теүәл үткәреү ваҡыты бар икәнен беҙ беләбеҙ.Мәҫәлән ,тәбиғәт менән бәйле ниндәй йола барамдарын беләһегеҙ

Шуларҙы әйтегеҙ әле.(Науруз байрамы март айында көн менән төн тигеҙләшкәндә башлана ла,ай ахырына тиклем һуҙыла.Ҡар һыуы байрамы,

Ҡар шәкәрләнеп ирей башлағас,апрель баштарында йә урталарында үткәрелә...).

Шулай итеп, балалар баҡсаһындағы балаларҙы йыл миҙгелдәре менән таныштырыуҙа халыҡ ижадын ҡулланыу һәйбәт һөҙөмтәләр бирәсәк.

Үҙ баһаһын белгән зирәк аҡыллы кешеләр көләмәс һөйләгән саҡта, башҡаларҙың аңлау-аңламау кимәлен тикшереп тә ултыра. Сөнки көләмәстәр, нигеҙҙә, тел төбө менән аңлатыла. Мәҫәл кеүек. Ҡайһы берәүҙәр баштан уҡ аңлай һалып ала, тик ишара йәки ым менән аңлағанын һиҙҙертеп ҡуя. Икенселәре, күҙҙәре упайып ҡарап тик ултыра. Уларға өҫтәлмә рәүештә аңлатып ҡуйырға кәрәк. Көләмәс һөйләгән саҡта, кешенең зирәклеге һынала. Йомаҡ-көләмәстәр башҡорт халҡында ныҡ таралған.

Бала үҫкән һайын уның уйнаған уйыны ла “үҫә”. Олораҡ йәштәге балалар уйыны йөкмәткеһе яғынан баә һәм төрлө булыуы менән бәләкәйҙәр уйыны менән айырыла. Бала уйнаған һайын уның фантазияһы ла байый, киңәйә төшә.билдәле бер уйындың йөкмәткеһен үҙгәртеп, уның нигеҙендә икенсе бер уйын барлыҡҡа килтерә йә булмаһа, шул уйындың йөкмәткеһен байыта.

Хәрәкәтле уйындарҙа ҡағиҙәләр төп шарттарҙың береһенә әйләнә һәм улар шул ҡағиһәләр нигеҙендә ярышыуға ҡорола. Ҡағиҙәне бала теүәл үтәргә тейеш,тимәк, уйын баланы айырым тәртипкә, мәжбүрилеккә, теүәллеккә өйрәтә. Уйындарҙы ойоштороу методикаһы һәр уйындың алдынан бирелә.

Сослоҡ, таҫыллыҡ,йылдамлыҡты тәрбиәләү өсөн хәрәкәткә ҡоролған уйындар, һүҙ, таҡмаҡ,диалогтар менән байытыла.

Күп энергия талап иткән уйындар көстө арттырһа, баланың һүҙгә йорлоғо, ижади һәләтлеге йырлы-таҡмаҡлы уйындарҙа тәрбиәләнә.

Уйындар уйнаусыларҙан ихтыяр көсө,сыҙамлылыҡ, ныҡышмалылыҡ талап итә,хеҙмәт һөйөүсәнлек тәрбиәләй. Үҙебеҙҙең уйындарҙы уйнап үҫкән балаларыбыҙ активыраҡ,татыуыраҡ,көслөрәк булырҙар тип ышанғы килә. Уларҙа үҙҙәренә ышаныс көсө, сослоҡ тәрбиәләү өсөн ошо уйындарҙан да ҡулайлыһы юҡ. Халыҡ “Уйындарҙа-хәрәкәт, хәрәкәттә-бәрәкәт” тип юҡҡа ғына әйтмәгән. Сөнки балалар өсөн уйын ҡоро хәрәкәт кенә түгел, бәлки тормошҡа әҙерләнгән хәрәкәт.

Тәрбиә эшен уйынһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Быны ата-әсәләр ҙә, тәрбиәселәр ҙә онотмаҫҡа тейеш. Ушинский билдәләүенсә “Уйын баланың киләсәген алдан әйтә”.

Ысынлап та, бала өсөн уйын-эшмәкәрлек, уйын-ысынбарлыҡ.Уйында бала йәшәй, сыныға, үҙ аллылыҡҡа өйрәнә.

Шулай итеп,балалар ауыҙ-тел ижады балаларҙың үҙенсәлекле фольклорының бер төрөнә инә.Балаларға әхләҡи тәрбиә биреүҙә һәм телмәр үҫтереүҙә ауыҙ-тел ижады бик ҙур роль уйнай.

Балалар ижадында һәм ауыҙ-тел ижадында тәрбиә биреүҙең тәүге нигеҙҙәре сағыла.Шулай булғас,бөгөнгө көндән үк беҙҙең төп маҡсаттарыбыҙҙың береһе булып балаларға үҙ халҡыбыҙҙың телен ғөрөф-ғәҙәттәренең тарихын¸мәҙәниәтен өйрәтеү торалыр тип уйлайым.Был эште беҙ ауыҙ-тел ижады аша балаларға еткерергә тейешбеҙ.Шул ваҡытта ғына беҙҙең башҡорт милләте йәшәр,балаларыбыҙҙың аң-белем кимәле юғары булыр,тағы ла кескәйҙәребеҙ әҙәплелеккә ,һөйләшеү оҫталығына,ололарҙы хөрмәттләргә өйрәнер.